Башҡортостан Республикаһы МР Бөрйән районы мәғариф бүлеге

Кәрҙәштәрем, кешелектең сәңгелдәге бында – Бөрйәндә,
Урал илдән тарих башлана.

Урал

Эпосы булған халыҡ - боронғо халыҡ.
Эпостар башҡорт халҡын Уралтауға
мәңгегә ҡаҙаҡлап ҡуйған.

Әхмәт Сөләймәнов

2016 йылды 29 июненән 1 июлено тиклем Бөрйән районының "Ағиҙел" балалар һауыҡтырыу лагерында "Урал батыр" эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәрҙең 18-се республика конкурсы үтә.

Бөгөнгә күркәм сарала көс һынашыу өсөн, район һәм зона этаптарында еңеү яулаған, Башҡортостандың 28 районынан һәм ҡалаһынан иң һәләтле 113 һүҙ оҫтаһы йыйылды. Шулай уҡ күрше Силәбе өлкәһенең Арғаяш районынан да ҡунаҡтарҙың булыуы шатлыҡлы күренеш.

Байрамды асыу тантанаһы командаларҙың парады менән башланды. Төрлө төбәктәрҙән килеүсе ҡунаҡтарҙы, мәртәбәле жюри ағзаларын ҡотлап, Бөрйән районы хакимиәте башлағы Рөстәм Динислам улы Шәрипов сығыш яһаны. Ул был конкурстың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ булыуын, уның көндән-көн мөһимерәк төҫ ала барыуын билдәләне. Йәш быуынды һүҙ сәнғәтенә өйрәтеү, уларҙың сәсәнлек һәләттәрен табыу һәм үҫтереү, балалар күңелендә изгелек тәрбиәләү был сараның төп маҡсаттары булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды район етәксеһе. Ул ҡатнашыусыларға -күтәренке кәйеф, ә жюри ағзаларының баһалау эшендә ғәҙел булыуҙарын теләне.

Конкурстың баһалау комиссияһы билдәле шәхестәрҙе үҙ эсенә ала: жюри рәйесе – Рәсәй Гуманитар Фәндәр академияһы академигы, филология фәндәре докторы, М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте кафедраһы профессоры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәнов, жюри ағзалары - филология фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте, фольклоры һәм мәҙәниәте кафедраһы профессоры, БР-ҙың атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре, яҙыусы, Рәми Ғарипов исемендәге әҙәби премия лауреаты Мирас Хәмзә улы Иҙелбаев; филология фәндәре кандидаты, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, фольклористика бүлеге мөдире Гөлнур Рауил ҡыҙы Хөсәйенова; педагогия фәндәре кандидаты, дәреслектәр авторы Вәкил Исмәғил улы Хажин; филология фәндәре кандидаты, Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте, фольклоры һәм мәҙәниәте кафедраһы доценты Зәкиә Ғәлимйән ҡыҙы Мырҙағолова; филология фәндәре кандидаты, Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте, фольклоры һәм мәҙәниәте кафедраһы доценты Илшат Камил улы Янбаев; яҙыусы, тәржемәсе һәм журналист, Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы ағзаһы, "Башҡортостан уҡытыусыһы" журналы баш мөхәррире, Рәсәй Федерацияһының почетлы мәғариф хеҙмәткәре Салауат Ғайса улы Кәримов.

Республика конкурсын үткәреүҙә матди ярҙам күрһәтеүсе бағымсылар – филология фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университетының башҡорт әҙәбиәте, фольклор һәм мәҙәниәт кафедраһы профессоры Зәйтүнә Яхъя ҡыҙы Шәрипова, Фәниә Фәрит ҡыҙы Йәнбирҙина, эшҡыуарҙар Зилә Хәләф ҡыҙы Насретдинова, Гөлфиә Ғарифулла ҡыҙы Григорьева, «Крекс» туристик фирмаһы генераль директоры Сергей Витальевич Колесников һ.б.

Хөрмәтле "Урал батыр" эпосын башҡарыусы йәш сәсәндәрҙең 18-се республика конкурсында ҡатнашыусы йәш сәсәндәр, ҡунаҡтар!

Һеҙҙе башҡорт халҡының үлемһеҙ ҡомартҡыларын - "Урал батыр", "Аҡбуҙат", "Аҡһаҡ ҡола", "Ҡара юрға", "Бабсаҡ менән Күсәк" эпостарын, мөғжизәле легенда һәм йырҙар тыуҙырған изге Бөрйән ерендә күреүемә шатмын!

"Урал батыр" эпосы бөтә донъя кимәлендә танылыу алған, кешелек донъяһының иң боронғо осорҙарын сағылдырған бөйөк әҫәр. Ижад ителеүенә менәр йылдар үтһә лә, уның тәрбиәүи әһәмиәте көндән-көн мөһимерәк була бара. Бөгөн дә ғалимдар эпостың серҙәрен, тел һәм фекер байлығын аса һәм уның әлеге көндө лә өйрәнелеп бөтмәгән мөғжизәле ҡобайыр булыуын иҫбатлай. Беҙ был рухи ҡомартҡыбыҙҙы быуындан-быуынға тапшырырға, халҡыбыҙҙың рухи байлығын һаҡлап ҡалыуын һайытмаҫҡа бурыслыбыҙ. Тап шул маҡсат бергә йыйҙы ла инде бөгөн беҙҙе.

Һеҙҙең барығыҙға ла Урал батырыбыҙҙың васыятын онотмаҫҡа, ерҙә изгелек, яҡшылыҡ таратыусылар булыуығыҙҙы теләйем. Ярыш сәмле, ғәҙел булһын! Урал батыр ере һеҙгә ҡыуаныстар, уңыштар бүләк итһен!

Бөрйән районы мәғариф бүлеге начальнигы
Р.Б. Шәрипов

“Урал батыр” эпосын ятлаған балалар ғүмергә етерлек аң-белем туплай һәм ата-бабаларҙың рухын яңырта.

Мирас Иҙелбаев

Башҡортостан балаларының “Урал батыр” эпосын ятлауы – үҙе бер фәһем, үҙе бер дәрес.

Фирҙәүес Хисаметдинова

“Урал батыр” эпосы берәүҙәр өсөн – тарих, икенселәргә – тел үрнәге, өсөнсөләргә – сәнғәт әҫәре, дүртенселәргә – милли идеологияны сағылдырған милли ҡомартҡы.

Әхиәр Хәкимов

Фольклор халыҡтың аҡылын, менталитетын күрһәтә, ә эпос – уның тамырлы, тарихлы булыуын иҫбатлаусы документ.

Әхмәт Сөләймәнов

Йәш сәсәндәр бәйгеһе көндәлеге

Салауат районы Тирмән урта мәктәбе уҡытыусыһы Ғатауллина Зәлиә Дилмөхәмәт ҡыҙы 4 уҡыусынан торған командаһы менән Күҙәмбәт яланына икенсе тапҡыр аяҡ баҫҡан. Бөрйән ере уға ят түгел. Еңеүгә өмөттәре ҙур, сөнки былтыр “Урал батыр” эпосын яттан һөйләү буйынса – 1-се, ә команда 2-се урын яуланы. “Бик көслө уҡыусым Ғәйнетдинов Айҙар 2015 йылда республика буйынса уҙғарылған ЮНЕСКО бәйгеһендә эпосты инглиз, рус телдәрендә һөйләп 1-се урын яуланы. Былтырғы йыл менән сағыштарғанда, быйыл сығыштарҙың бер сәхнәлә генә ойошторолоуы оҡшаны. Көн һалҡын булһа ла, бөрйәндәрҙең беҙҙе йылы ҡаршылауҙары күңелдәргә йылы дәрт, нур өҫтәне. Бәйге матур бара. “Урал батыр” төйәгендә килеп сығыш яһау үҙе бер мәртәбә. Уҡыусыларға теләгем шул: эпосты ятлаһындар, аңлаһындар. Сөнки уның әһәмиәте бик ҙур. Рәхмәт”.

Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Бәпес ауылы урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Абдуллина Ләйсән Шәрифулла ҡыҙы менән әңгәмә.

“Районда һәм зона ярыштарында призлы урын яулап, мөғжизәле Бөрйән районына килеү бәхетенә ирештек. Шүлгән-таш мәмерйәһенә барырға булғас, дәртләнеп сыҡтыҡ юлға. Юл алыҫ икән тиһәк ,“һә” тигәнсе килеп тә еттек. Командала 4 уҡыусы – 2 мәктәп иҫәбенән төҙөлдө. Уҡыусым Хәсәнова Ильнара өс йыл рәттән сығыш яһай. Быйыл 3500 юл ятланы. Өмөтөбөҙ ҙур. Бөрйән ерендә үткәрелгән бәйге беҙҙең күңелдәрҙә оҙаҡ йылдар йылы тәьҫораттары менән йылытып торор”.

“Бөрйән ере мөғжизәләргә бай. Иҫ киткес тәьҫораттар алдым. Өс йыл рәттән Бөрйән районына килеүемә шатмын. Еңеүгә өмөтөм бар, шулай ҙа ҡаушата. Әлеге ваҡытта 3000 юл ятланым, үҙем ҡурайҙа уйнайым. Был оҫталыҡҡа етәксем Әминева Рәйфә Ильяс ҡыҙы менән бөтә тырышлыҡты һалып өйрәндек. Килеүемә бик шатмын. Элекке таныштарымды осраттым. Әлегә бөтәһе лә яҡшы”, – тип үҙенең тәьҫораттары менән Шишмә районының Дурас урта мәктәбе уҡыусыһы Ғәймәлова Айһылыу уртаҡлашты.

Тәнәйҙәр – Урал батыр образында

Йәш сәсәндәр бәйгеһен асыу өлөшөндә үҙенсәлекле сығыш байрамды йәмләне: сәхнәлә береһенән береһе бәләкәйерәк сәсәндәр ҡыйыу рәүештә бөйөк эпосты яттан һөйләп кенә ҡалманы, оҫта итеп образдарҙы һынландырҙы. Уларҙы яратып “тәнәй Урал батырҙар” тип атанылар. 1-се һанлы Иҫке Собханғол балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре Кәримова Әйдинә, Әмиров Арыҫлан, Буранбаев Азамат исемле кескәйҙәр ҡунаҡтарҙы әсир итте. Афарин, тәнәйҙәр!